Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа №30»
городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

| Рассмотрено | Согласовано | Утверждено |
|---|---|---|
| на заседании ШМО учителей родных языков | с заместителем директора А.И.Емельяновой | директором МАОУ «СОШ№30» |
| Протокол № 4 | «29»августа 2023г. | О.А.Валикова |
| от « 28 » августа 2023г. | | Приказ № 388 |
| Руководитель МО Г.М.Фахретдинова | | от «29 »августа 2023 г. |

# Рабочая программа по родной(башкирской) литературе для 7-9 классов

Составители: Абдуллина Л.Р., Багаутдинова Э.М.,Фахретдинова Г.М.

Стерлитамак, 2023

Уҡытыу рус телендә алып барылған 7-9 кластар өсөн туған(башҡорт)әҙәбиәтенән эш программаһын төҙөгәндә урта дөйөм белем биреүҙең яңы федераль дәүләт стандарттары, федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла: Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, Мәғариф министрлығының ”Дәүләт белем биреү стандарттарының федераль компоненттарын раҫлау тураһында” Законы , «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы. Эш программаһы “Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11 кластары өсөн “Туған( башҡорт) тел һәм әҙәбиәт” предметы буйынса белем биреү программаларына(авт.-төҙ. В.И.Хажин, Ә.Х.Вилданов, Ф.Ә.Аҡҡужина, Өфө- Китап, 2020.- 296 бит.) таянып төҙөлдө.

## I .Уҡыу –уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштереү.

7-9-сы кластарҙа башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың интегратив маҡсаты уҡыусыла элементар коммуникатив компетенция формалаштырыу тәшкил итә.

Башҡорт телен 7-9 кластарҙа өйрәнеүҙең **шәхси һөҙөмтәләренә** түбәндәгеләр инә:

-үҙенде илдең гражданины итеп тойоу;

-телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡкабул итеү;

-дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кещененң индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;

-башҡортса үткәрелгән саралар ярҙамында уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

-уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;

-7-9 класс уҡыусыларының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;

-уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:** башҡорт теле нормалары -фонетика һәм орфоэпия, башҡорт әҙәби теле, һүҙ төркөмдәре, ябай һөйләм һәм ҡатмарлы һөйләм төрҙәре, синтаксисы һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Синтаксик-стилистик күнегеүҙәрҙе башҡарыу. Фольклор әҫәрҙәренән һуң башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының туған тел, тыуған ер, дуҫлыҡ, хеҙмәт, ил яҙмышы, азатлыҡ өсөн көрәш темаларына арналған иң күренекле әҫәрҙәре үҙләштереү.

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте уның тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүен, әйләнә- тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.

Ойоштороу эшмәкәрлеге таянып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлаштырыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.

Аралашыу (коммуникатив) эшмәкәрлеге белем алыу процесында аралашырға өйрәнеүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.

Предмет кимәле. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Компьютер ярҙамында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә бер төркөм дидактик мәсьәләләрҙе хәл итеп була: лексиканы өйрәнеү (компьютер һүҙлектәрен файҙаланыу); дөрөҫ әйтелеш өҫтөндә эш (башҡорт теле дәреслектәрен, тауыш яҙыу программаларын файҙаланыу); орфографик күнегеүҙәр (орфографик һүҙлекте һәм компьютерҙың орфографияны тикшереү программаһын файҙаланыу); грамматик күренештәрҙе үҙләштереү (тестар ярҙамында); эҙләнеү процесында яңы мәғлүмәт алыу, һөйләү телмәрен үҫтереү, һөйләмдәр һәм текстар төҙөү, редакторлау һ.б.

Проектлау технологияһы - педагогик процесты планлашырыуҙа ҡулланыла торған үҙенсәлекле методик система.

Проектлау технологияһының төрҙөре:

-уйын проекты;

-эҙләнеү поекты;

-ижади проект;

-информацион проект;

-логик-мәғәнәүи модель (ЛМН).

Проект методы уҡыусының ихтыяр көсөн, ижади мөмкинлектәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә, уҡыусылар фәнни-тикшеренү эшенә йәлеп ителә. Проет эше уҡыусының интеллектуаль үҫешен тәьмин итә, уның фекерләү һәләтен үҫтерә, үҙ эшенә баһа бирергә өйрәтә.

Фәнни-тикшеренеү эше.

Фәнни-тикшеренеү эшен заманса уҡыу-уҡытыу технологияһы һәм аң-белем, ғилем алыуҙа уҡыусы менән уҡытыусының ижади хеҙмәттәшлеге итеп билдәләп, уҡыусыларҙы фәнни эш менән шөғөлләнергә өйрәтеү бурыстарын билдәләйбеҙ:

-балаларҙа һәр нәмәгә иғтибар менән ҡарау, ҡыҙыҡһыныу, эҙләнеү теләген арттырыу; ихтияр көсөн үҫтереү; йәш үҙенсәлектәренә тура килгәнсә, күңелгә яҡын ниндәйҙер күңелгә яҡын ниндәйҙер бер фән буйынса тәрәнерәк белем алыу мөһимлеген зиһенгә һеңдереү, ижади эшләү һәләтен үҫтереү;

-уҡыусыларға уйланырлыҡ, фекер йөрөтөрлөк,хыялдарын уятырлыҡ яңы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт алырға ярҙам итеү; донъяға ҡараштарын киңәйтеү;

-ҡыйыулыҡ, аныҡ фекерләү тәрбиәләү; һүҙ байлығын үҫтереү; алға ҡуйған маҡсатҡа өлгәшеү алымдары менән таныштырыу;

-фәнни-тикшеренеү эше менән шөғөлләнергә йәлеп итеү; уның методикаһын үҙләштереү, практик күнекмәләр алыу ваҡытында фәнни культуралар тәрбиәләү;

-мәктәптә фәнни-тикшеренеү эше менән шөғөлләнеүҙең теоретик һәм практик нигеҙҙәрен булдырыу.

Аңлы уҡырға өйрәтеү һәм текст менән эш.

Аңлы уҡыу - текстың йөкмәткеһен тулыһынса үҙләштереүҙе талап итә. Текст ашыҡмайынса, һәр абзац ентекләп уҡыла, аңлашылмаған урындар ҡабаттан уҡып сығыла. Уҡыусыларға уҡыу өсөн практик яҡтан әһәмиәтле текстар тәҡдим итеү: рецепттар, эпистоляр текстар (хаттар, ҡотлау открыткалары, әҙәби әҫәрҙән өҙөктәр, комикстар, экиәттәр, төрлө белдереүҙәр. Аңлы уҡырға өйрәткәндә түбәндәгеләргә иғтибар итеү:

-текстың темаһын билдәләү;

-коммуникатив бурысты асыҡлау;

-микротемаларға бүлеү;

-график моделләштереү.

Аңлы уҡырға өйрәтеү - телмәр эшмәкәрлегенең мөһим этаптарының береһе. Уҡытыу маҡсатынан сығып, уҡытыусы дәрескә төрлө эштәрҙе һайлап ала, уҡыу техникаһын, уҡыу күнемәһен үҫтҫреү өстөндә сичтемалы эш алып барыла.

А. Коммуникатив сферала (башҡорт теле һәм әҙәбиәтен туған тел булараҡ өйрәнеүҙә)

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында этикет диалог алып барыу;
- уҡыусының предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы һәм әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен һөйләп биреү;

тыңлап аңлауҙа:

-уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы текстарҙың, әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен аңлауы һәм һөйләүе;

уҡыуҙа:

әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен ҡысҡырып уҡыу, аңлау һәм ҡыҫҡаса һөйләү;
Өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙелә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

Яҙма телмәрҙә:

- Яҙыу техникаһына эйә булыу;
- уҡылған әҫәрҙәр буйынса бәләкәй хикәйә төҙөү;

Б.Тел компетенцияһы (тел сараларынүҙләштереү).

- Башҡорт әҙәбиәтендә тексты дөрөҫ итеп аңлап уҡыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- Төрлө һөйләм төрҙәрен айыра белеү, телмәрҙә ҡулланыу;
- фонетика һәм орфоэпия, башҡорт әҙәби теле, һүҙтөркөмдәре, ябай һөйләм һәм ҡатмарлы һөйләм төрҙәре, синтаксис һәм пунктуация,һүҙбәйләнеш һәм һөйләм төрҙәрен практик рәүештә ҡулланыу. Синтаксик- стилистик күнегеүҙәрҙе башҡарыу..

Социомәҙәни компетенция.

- Географик атамаларҙы, билдәле яҙыусыларҙың әҫәрҙәренең исемдәрен,персонаждарын белеү, уларға характеристика биреү

Танып белеү сфераһы:

- Айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һәм ҡатмарлы һөйләмдәр кимәлендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтендә күренештәрҙе сағыштыра белеү;
- 5-9 класс тематикаһы кимәлендә күнегеүҙәр эшләй белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицалар,һүҙлектәр менән эш итеү;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу
- үҙ-үҙенде5-9 класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

В. Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:

- башҡорт теле һәм әҙәбиәте әҫәрҙәре ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

Г. Эстетик сферала:

- Башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәре менән танышҡанда персонаждарға, ваҡиғаларға ҡарата үҙ фекереңде әйтә белеү.

Д. Хеҙмәт сфераһында:

- Уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

Төп йөкмәтке линиялары.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте курсында түбәндәге йөкмәтке линияларын билдәләп була:

- телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрендә коммуникатив оҫталыҡтар;
- тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре;
- социомәҙәни компетенция;
- Дөйөм уҡыу һәм махсус уҡыу оҫталыҡтары.

## II . Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе.

Башҡорт әҙәбиәтен сәғәт күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота (7-8 кластарҙа аҙнаһына 1 сәғәт ,уҡыу аҙнаһы 34 сәғәт, 9 кластарҙа аҙнаһына 1 сәғәт иҫәбенән , 33 уҡыу аҙнаһы)

### 7-се класс

**Башҡорт халыҡ ижады.**
Әкиәттәр тураһында түбән кластарҙа үткәнде иҫкә төшөрөү. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр. Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. «Етем төлкө».Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма». Тормош-көнкүреш әкиәттәре «Алтын тамсы». Әкиәттәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү. Исемдәр биреп план төҙөргә өйрәтеү. Әҙәбиәт теорияһы. Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау. Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Йыр тураһында төшөнсә. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда йырҙың роле. Урал, Ғилмияза йыры. Таҡмактар тураһында төшөнсә. Бейеү таҡмаҡтары. Уйын таҡмаҡтары. Таҡмаҡтарҙың башҡарылыу үҙенсәлектәре, уларҙың йырҙарҙан айырмаһы.
**Алтын көҙ.**
М.Тажи «Алтын көҙ», Ф.Рәхимғолова «Көҙ» шиғырҙарында көҙгө тәбиғәттең, көҙ билдәләренең һүрәтләнеше. Әҙәбиәт теорияһы: Поэтик телдәге һүрәтләү сараларын ҡабатлау. Метафора тураһында төшөнсә.
**Уҡыу - белем шишмәһе .**
Раил Байбулатов. «Нурлы күҙҙәр». Н.Мусин. «Тайғаҡ баҫма». Әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡ, тырышлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм әхлаҡ проблемаларының сағылышы. Хәмзә һәм уҡытыусы, һуғыш ветераны Уғатар ағай образдары. Рәхмәт менән Әҫҡәт дуҫлығы. Рәхмәткә хас сифаттар. Хәмзәнең ҡылығын баһалау.
**Дуҫлыкта – берҙәмлек.**
Б.Бикбай. «Рус теле», Р.Сафин. «Һабаҡташтарыма», М. Кәрим. «Миләш». Был шиғырҙарҙа дуҫлыҡты данлау. Ысын дуҫлыҡты баһалау. Рус һәм башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡҡа һоҡланыу, ғорурланыу тәрбиәләү. Р.Байбулатов. «Һарыбай». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда дуҫлыҡтың сағылышы. Төп геройҙарҙың характерҙарына хас сифаттар. Ә.Бикчәнтәев. «Бакенщиктар илаҡ булмай». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда батырлыҡтың сағылышы. Ата һәм ул образдары.
**Хеҙмәте юҡтың - хөрмәте юҡ.**
М.Ғафури. «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырында эшсәнлек, дуҫлыҡ һәм дошманлыҡтың ҡапма-ҡаршы һүрәтләнеүе. М.Ямалетдинов. «Ураҡ өҫтө» шиғырында ураҡ ваҡытында иген урыусы комбайнерҙың хеҙмәте. Уйылдан образы. Ж.Кейекбаев. «Оморҙаҡ бабай». Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Оморҙаҡ бабай образына хас сифаттар.
**Башҡортостан-ғәзиз ерем.**
Ә.Үтәбай. «Башҡортостан» шиғырында лирик геройҙың кисерештәрендә Башҡортостан, Тыуған ил образы. А.Игебаев. «Онотманым һине, ауылым» шиғырында хистәр байлығы,

тыуған ерҙең күңелгә яҡын булыуын еткереү. М. Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында» Шиғырҙа ҡайын һәм япраҡ образы. Башҡортостандың данлы тарихының сағылышы.

**Ап-аҡ ҡарҙар яуа.**

К.Кинйәбулатова. «Һаумы, аҡ ҡыш!» шиғырында ҡыш миҙгеленең, тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше. Ә.Әһлиуллин. «Биҙәкле сана». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Боронғо сана яһау һөнәренең сағылышы. Имаметдин ҡарттың һөнәре, халыҡ араһындағы абруйы. Әҫәрҙә дуҫлыҡ, татыулык мотивы.

**Ил намыҫы - ир күңелендә.**

Р.Шәкүр. «Һаҡта тора илдең улдары» шиғырында Тыуған илде, тыныслыҡты һаҡлаусы ил улдары образдары. Ф.Аҡбулатова. «Атай икмәге» хикәйәһе. Йөкмәткене үҙләштереү. Әҫәрҙә Бөйөк Ватан һуғышының һүрәтләнеше. А.Баһуманов. «Юламан». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткәһен үҙләштереү. Проблемаларына, образдарына характеристика биреү. План төҙөп, план буйынса һөйләргә өйрәнеү.

**Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр.**

Гөлшат Зәйнәшеваның "Йырлайым әсәйҙәр тураһында йыр" шиғырында әсәләргә һөйөү. Ә.Бикчәнтәев. «Яраланған бүре күҙҙәре». Әҫәрҙә әсәнең ҡыҙын үҙ аллы тормошҡа әҙерләүе. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһөн үҙләштереү. Һорауҙарға яуап биреү, план төҙөп һөйләргә өйрәнеү

**Эх, күңелле яҙ килә!**

Р.Ниғмәти. «Яҙ килде, яҙ!» шиғырында яҙ килеү менән тәбиғәттең уяныуының, яҙғы эштәр башланыуының һүрәтләнеше. Р.Ғариповтың «Һабантурғай» шиғырында яҙ килтереүсе һабантурғай образы. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, төп идеяларын асыу.

**Тел - тере шишмә .**

Ҡ.Аралбай. «Башҡорт теле». Идея-тематик йөкмәкеһен үҙләштереү.

**Йәмле йәй.**

М.Ғафури. «Болон» шиғырында йәйге болон матурлығының тасуирланыуы.

## 8-се класс

**Мәктәп – белем шишмәһе.**

С. Әлибайҙың " Мәктәп юлы" шиғырында юл образы. Н. Мусиндың "Һабаҡ" әҫәрендә йәйге ялдың һүрәтләнеше. Р. Тимершиндың "Уйлап табыусы" әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Логик баҫым. Һөйләү маҡсаты яғынан һөйләм төрҙәре.

**Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы.**

"Ике сәсән", "Сура батыр" ҡобайырҙарының идея-тематик йөкмәткеһе.

**Көҙ – хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле.**

З. Биишеваның " Көҙгө ямғыр" Х. Назарҙың "Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын" шиғырҙарында тәбиғәтте тасуирлау. Р. Ханнановтың "Икмәк ҡәҙере", Р. Өмөтбаевтың "Әмир баҫыуы" әҫәрендә хеҙмәттең әһәмиәте.

**Башҡортостан – алтын бишек.**

А. Игебаевтың "Башҡортостан ил генәм", "Ҡырлас тауҙар иле – Башҡортостан". И. Кинйәбулатовтың " Дуҫлыҡ төйәге" шиғырында Тыуған ер образы. Н. Нәжмиҙең "Өфө йүкәләре" шиғырында образдар.

**Салауат батыр – ир ине.**

"Салауат батыр" Ф. Күзбәков "Яу ораны бит һин, Салауат" ҡобайыры. Ф. Рәхимғолова "Салауат", Т. Дәүләтбирҙина "Салауат рухы" .Я. Хамматовтың "Салауат" романында тарихи осор. Я. Хамматовтың "Салауат" романында Салауат образы.

**Ҡыш.**

Ш. Бабич "Ҡышҡы юлда", Ф. Рәхимғолова "Ҡыш" шиғырҙары. Б. Рафиҡовтың "Бүреләр" әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. И. Теләүембәтовтың "Маралым таңы" әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе .А. Йәғәфәрованың "Кескәй шишмә" хикәйәһендә сағылған проблемалар.

**Данлы йылдар, шанлы йылдар.**

М. Кәрим ижады. “Үлмәҫбай” поэмаһында образдар. Үлмәҫбай, Теребай образдарына характеристика. Н. Ғәлиевтың “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Р. Өмөтбаевтың “Генерал Кусимов” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.

**Әсәйем – күңел ҡояшым.**

Ш. Бикҡолдоң “Әсәйемдең кәңәштәре” шиғырының идеяһы. Т. Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.

**Әҙәп барҙа – иман бар.**

Х. Назарҙың “Өс һүҙ” шиғырының идеяһы. М. Ямалетдиновтың “Иман” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. З.Ғәлимовтың “Ялан сәскәләре” әҫәрендә атай һәм ул мөнәсәбәтенең сағылышы.

**Шаулап, гөрләп яҙ килә.**

Р. Ғариповтың “Яҙғы йыр”, З. Ураҡсиндың “Алмағас” шиғырында тәбиғәттең һүрәтләнеше. Р. Сафиндың “Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе” шиғырында образдар.

**Ай Уралым, Уралым!**

Ҡ. Аралбайҙың “Ер тураһында ете һүҙ”, Б. Бикбайҙың “Ер” шиғырҙарында ерҙе һаҡлау проблемаһы. Өндәш һүҙҙәр һәм улар эргәһендә тыныш билдәләре. Ж. Кейекбаев “Урал тураһында ҡобайыр”. Н. Мусиндың “Һуңғы солоҡ” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Н. Мусиндың “Һуңғы солоҡ” әҫәрендә күтәрелгән проблемалар.К. Шафиҡованың “Уйна, ҡурай!” әҫәрендә ҡурай образы.

**Йәй.**

Ф.Рәхимғолованың “Бал ҡорто һәм күбәләк” шиғырының төп идеяһын асыҡлау.Ш. Янбаевтың “Тегәнәк” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе.. Р. Солтангәрәевтың “Һуңғы һунар” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Ә. Хәмәтдинованың “Йәшел аптека” әҫәрендә үләндәрҙең әһәмиәте.

## 9-сы класс

**Туған тел.**

Р.Ғариповтың “Тел”, Р Мифтаховтың “Мираҫ”шиғырҙарында телгә һөйөү.Б.Бикбайҙың “Тере шишмәләр”хикәйәһендә күп тел белеүҙең әһәмиәте.

**Башҡортостан.**

Ҡ.Шафиҡованың “Тыуған яҡ”,Р.Мифтаховтың “Күрҙем һине”шиғырҙанда тыуған яҡҡа һөйөү темаһы.М.Әбсәләмовтың “Йомағужа тирәктәре” хикәйәһендә кеше ғүмеренең сағылышы. Ф.Аҡбулатова. Тәбиғәт беҙҙең яҡлауға мохтаж (белешмә).
А.Ғарифуллиндың” Гөрләүек”, З. Алтынбаеваның “Балан”шиғырҙарында тәбиғәт һүрәтләнеше. М.Кәримдең “Айыу мажараһы”хикәйәһендә хайуандарҙың һүрәтләнеше.
В.Ғүмәров. Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үҫемлектәре.. Әҙәби жанр тураһында төшөнсә.Ҡ. Аралбайҙың “ Янғантау”шиғырында иҫтәлекле урындың кеше өсөн әһәмиәте.

**Тарих.**

Ә.Бейеш”Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше”. Роман тураһында төшөнсә.
Ғ.Хисамовтың” Алдар менән Тәфтиләү” романында образдарҙың һүрәтләнеше.
С. Ярмуллиндың” Башҡорт аты”, Т.Ғиниәтуллиндың” Башҡорт аты”хикәйәләрендә кешеләрҙең аттарға ҡарата мөнәсәбәте.Р. Өмөтбаевтың “ Ғилмишәриф” повесында ат менән кешенең ҡаһарманлығы һүрәтләнеүе.Ғ.Вәлиуллиндың “ Ҡәлғә хужаһы һәм тотҡон” белешмәһендә тарихи факттар. Повесть тураһында төшөнсә.
Р.Мифтаховтың“Ҡалҡан”,Р.Назаровтың “Һалдат”шиғырҙарында Ватанға хеҙмәт итеүе һүрәтләнеше.Ә.Үтәбайҙың “ Һаҡмар һыуы аға бит”әҫәренең идея- тематик йөкмәткеһе.
Ә.Үтәбайҙың “ Һаҡмар һыуы аға бит”әҫәрендә Ғәбделбарый образына характеристика.
Н.Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша”драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.Н.Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша”драмаһында Хәкимовтың образы.

**Боронғо әҙәбиәт.**

Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне.Байыҡ сәсәндең шәхесе.образдар.Ҡол Ғәлиҙең “Йософ Ҡиссаһы”. Йософ образына характеристика.Юрматы ырыуы шәжәрәһе.Шәжәрәләрҙең әһәмиәте. М.Аҡмулланың “Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе”,“ Инсафлыҡ”әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе.

**Башҡорт милли аштары,йолалары,байрамдары.**

Байрамдарыбыҙ тарихынан.З.Әминевтың “Башҡорт һабантуйы”тексында байрамдың һүрәтләнеше.

**Сәнғәт.**Ш.Бабичтың “Ҡурайҡайға” шиғырында ҡурай образы. Күренекле ҡурайсыларҙың ижади портреттары.

**Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы.**

И.Кинйәбулатовтың “Һеҙҙең йәшәү менән”, Р.Мифтаховтың “ Әсә”шиғырҙарында әсәйҙәргә ҡарата һөйөү. Р.Кинйәбаевтың “Мин ҡайтырмын, әсәй”, Ә.Еникиҙың “Матурлыҡ” хикәйәләренең йөкмәткеһен үҙләштереү. Әсәйҙәр образына характеристика.

**Мәңгелек ут.**

Ә.Моратовтың “Тере хәтер”,Р.Мифтаховтың “Боҙло ҡуҙ”шиғырҙарында һуғыш темаһы.Ж.Кейекбаевтың “Зөбәй Үтәғолов” хикәйәһендә батырлыҡ темаһы. М.Кәримдең “Малайҙар”хикәйәһенең йөкмәткеһе. Анастас менән Младен образдарына характеристика. Ш.Янбаевтың “ Йәнекәй ҡарт” хикәйәһенең идея –тематик йөкмәткеһе. Әкрәм менән Раяндың дуҫлығы. Әҙәби процесс тураһында төшөнсә.

**Дуҫлыҡ.**Н.Нәжмиҙең “ Дан иле, яҙ иле”, Х.Ғиләжевтың “ Россияға йыр” шиғырҙарында халыҡтар дуҫлығы.

## III.Тематик планлаштырыу

7-се класс

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Башҡорт халыҡ ижады | 7 |
| 2 | Алтын көҙ | 3 |
| 3 | Уҡыу-белем шишмәһе | 2 |
| 4 | Дуҫлыҡта-берҙәмлек | 4 |
| 5 | Хеҙмәте юҡтың- хөрмәте юҡ | 3 |
| 6 | Башҡортостан-ғәзиз ерем | 3 |
| 7 | Ап-аҡ ҡарҙар яуа | 3 |
| 8 | Ил намыҫы – ир күңелендә | 3 |
| 9 | Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр | 2 |
| 10 | Эх, күңелле яҙ килә! | 2 |
| 11 | Тел – тере шишмә | 1 |
| 12 | Йәмле йәй | 1 |
| | Бөтәһе | 34 |

8-се класс

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Мәктәп белем шишмәһе | 3 |
| 2 | Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы | 1 |
| 3 | Көҙ – хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле | 3 |

| | | |
|---|---|---|
| 4 | Башҡортостан – алтын бишек | 2 |
| 5 | Салауат батыр – ир ине | 2 |
| 6 | Ҡыш | 4 |
| 7 | Данлы йылдар, шанлы йылдар | 4 |
| 8 | Әсәйем – күңел ҡояшым | 3 |
| 9 | Әҙәп барҙа – иман бар | 2 |
| 10 | Шаулап, гөрләп яҙ килә | 3 |
| 11 | Ай Уралым, Уралым! | 5 |
| 12 | Йәй | 3 |
| | Бөтәһе | 34 |

9-сы класс

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Тере шишмәләр | 2 |
| 2 | Кендегемде киҫкән ер | 4 |
| 3 | Төйәк булған тыуған ер | 5 |
| 4 | Данлы тарих | 2 |
| 5 | Рухи тамырҙарыбыҙ | 4 |
| 6 | Ир –егеткәй менән ат башы | 2 |
| 7 | Байрам,байрам…( | 2 |
| 8 | Уралымда үҫкән,ай, ҡурайым… | 3 |
| 9 | Ватанға хеҙмәт-изге бурыс | 2 |
| 10 | Айға ла ғына,көнгә тиңләмәйем | 3 |
| 11 | Мәңгелек ут. | 3 |
| 12 | Берҙәмлек- мәңге һаҡлар хазина. | 1 |
| | Бөтәһе | 33 |

Контроль эштәр күләме туған телдәр берекмәһе ултырышында ҡаралып, (28.08.2023), уҡыусыларҙың белем кимәлен һәм сәғәттәр һанын иҫәпкә алып, түбәндәгесә билдәләнде:

| Эш төрҙәре | Кластар | | |
|---|---|---|---|
| | 7 | 8 | 9 |
| Һорауҙарға яуап | - | - | - |
| Диктант | - | - | - |
| Изложение | - | - | - |
| Инша | - | - | - |
| Контроль эш,тест | 2 | 2 | 2 |
| | 2 | 2 | 2 |